Билал ауыл советы

ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы

И.Ш.Саптаров

# йыллыҡ отчеты

## Хөрмәтле депутаттар, саҡырылған ҡунаҡтар,актив!

Йәмәғәт, бөтәгеҙгә лә мәғлүм булыуынса,үткән йыл Театр йылы һәм Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығын билдәләп үттек бит инде. Ошо сараларҙы ойошҡанлы атҡарып сығыу өсөн Ауыл советы һәм хакимиәте тарафынан яуаплы кешеләр һәм үткәреләсәк саралар планы расланды. Йыл дауамында был тәңгәлдә маҡсатлы эш алып барылды.

Ауыл советының Уставына ярашлы 2019 эшмәкәрлек йылында бөтәһе 8 совет ултырышы, сходтар үткәрелде. Был ултырыш, сходтарҙа депутаттар, актив менән халыҡ ҡатнашлығында бик күп көнүҙәк мәсьәләләр тикшерелде һәм ҡарарҙар ҡабул ителде. Сходтарҙа ауылдарҙы төҙөкләндереү, көтөүҙәр ойоштороу, янғынға ҡаршы көрәш, салым йыйыу, урындағы башланғыстарҙы яҡлау программаһы проектында ҡатнашыу, ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын йыйыуҙы тәртипкә һалыу кеүек мәсьәләләр тикшерелде.

Бөтәгеҙгә лә мәғлүм булыуынса, Билал ауыл биләмәһенә 5 ауыл инә, биләмәлә 2020 йылдың 1 ғинуарына 2017 (2057) кеше теркәлгән һәм йәшәй. Шул иҫәптән:

Билалда - 191 өйҙә / 644 ( 665) , Һәмәндә – 92 өйҙә/ 352 (350) , Күгиҙелдә – 141 өйҙә/ 453 ( 477), Өмөтбайҙа – 195/ 529(538), Баймырҙала – 11/ 29 кеше йәшәй. Эшкә яраҡлы үң йәштән ҙө йәшкә тиклем – 1215 ( 1251) кеше, шуларҙың 632- 3е (700) ир-егеттәр, 583(551) ҡатын-ҡыҙҙар тәшкил итә. Хаҡлы ялдағылар- 184 кеше, шуларҙың 38 яңғыҙ өлкән йәштәгеләр. Күп балалы ғаиләләр 60(55) иҫәпләнә, неблагополучный ғаиләләр – 13. 502 кеше хәрби иҫәптә тора, шуларҙың 11(7) Рәсәй Хәрби Көстәре сафында, 17 йәше тулған 19(18) үҫмер тәүге тапҡыр хәрби иҫапкә алынды.

Ауыл Советы биләмәһендә кәрәкле социаль хеҙмәттәр күрһәткән учреждениелар, эшҡыуарлыҡ өлкәһендә эшләүселәр бар һәм улар арта бара. ә – урта дөйөм белеем биреү учреждениеһы - Билал һәм Өмөтбай мәктәптәре, 1- башланғыс Күгиҙел мәктәбе, 3- балалар баҡсаһы, 3 – ФАП, 3- клуб, почта бүлексәһе, 4- мәсет, ветучасток, 1- теген цехы – үҙ

кеше эшләй, 3- китапхана эшләп килә. 8 – крәҫтиән-фермер хужалығы (үткән йылда – 6),15 (14) – шәхси эшҡыуар теркәлгән. Бөтәһе 11 магазин(14), 1 – икмәк бешереү цехы бар. 627 – хужалыҡта – 2187 баш эре мөгөҙлө мал, 1051 – баш ваҡ мөгөҙлө мал, 746 баш- йылҡы малы аҫрала. Күсәрбаев Илдар Булат улы, Ишморатов әсләм әбүзәр улының крәҫтиән-фермер хужалыҡтары уңышлы эшләп килә. Күсәрбаев Илдар Булат улы, Әминев Ришат Зәйнулла улы үткән йылда «Ғаилә малсылыҡ фермаһы» гранттарын яуланылар. Илдар 50 баш Герефорд тоҡомло һыйыр малы Туймазынан алып ҡайтасаҡ.

Ауыл биләмәһендәге мәктәптәрҙә бөтәһе 222 бала/ 248, былтырғы менән сағыштырғанда 26 балаға әҙ. Билал мәктәбендә – 147 бала, Өмөтбай мәктәбендә – 60 бала, Күгиҙелдә – 15 бала белем ала.Мәктәптәрҙә уҡыу, балалларҙы ашатыу сифатлы ойошторолған, уҡыу өсөн бөтә шарттар ҙа бар. Балалар төрлө олимпиадаларҙа, спартакиадаларҙа, мәҙәни сараларҙа актив ҡатнашып призлы урындар яулап торалар. Бөтә Рәсәй Данс-Эра конкурсы лауреаттары, бөтә Рәсәй «Танцевальный порыв» конкурсында 1-се һәм 3-сө урындар, «Еҙ үксә» район конкурсында 2-се урын һәм башҡалар балалар бейеү коллективы( етәксеһе әхмәтова Дилара Сәлимйән ҡыҙы). Бөтә Рәсәй «Башҡортостан таланттары» конкурсында 3-сө урын, «Йәш бейеүсе» район конкурсында сольный Фаррахова Нәзилә – 1 урын, дуэт Сәғәҙәтовтар Артур һәм Зарина – 1 урын, дуэт Фаррахова Нәзилә, Буляков Илһам – 2 урын.( етәксеһе Мурзагильдина Зәлифә Ғәйфулла ҡыҙы). Йыл уҡытыусыһы – 2020 район конкурсы лауреаты Садыҡова Альбина Вәкил ҡыҙы уҡыусылары менән төрлө сараларҙа юғары күрһәткестәргә өлгәште. 3 йыл рәттән « Йәгеҙ әле, егеттәр» район конкурсында 1-се урын алған егеттәре (етәксеһе Кәримов Азамат Фәнил улы),башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән республика кимәлендә призер әҙерләүсе Гүмәрова Земфира Фәзлиәхмәт ҡыҙы. Ошо үрҙә әйтеп үтелгән уҡытыусылар коллективы маҡтауға лайыҡ (етәксеһе Садыҡов Фәнүр Фәрит улы).

Ауыл Советы биләмәһендә 3 Фап-та 4 медицина хеҙмәткәре эшләй. Ауырлыҡтарға ҡарамай, тәү медицина ярҙамы күрһәтеү, профилактика, көндәлек дауалау процедуралары яҡшы кимәлдә ойошторолған.

Почта бүлексәһе тарафынан гәзит-журналдарға яҙылыу үткәрелә, таратыла, пенсиялар түләнә, коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙәр ҡабул ителә, тауарҙар һатыла. Хәҙерге көндә 5 ауылды 3 кеше хеҙмәтләндерә һәм 1 элемтәсе.Район буйынса 2020 йылдың беренсе яртыһына ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу буйынса алдынғылар рәтендәбеҙ. Бында шулай уҡ китапхана хеҙмәткәрҙәренең тырышлығы ҙур әлбиттә.

Уҙған йыл ваҡиғаларға бай булды. Билал ауыл биләмәһе Рәсәйҙә иғлан ителгән Театр йылына арналған бик күп сараларҙа әүҙем ҡатнашты. Мәҫәлән, « Сихри сәхнә» район бәйгеһендә Күгиҙел клубы 2-се урын яуланы. (Етәксеһе Нарынбаев А.Ф.), Өмөтбай ауылынан Сәғәҙәтова Зарина «Иң яҡшы роль» номинацияһына лайыҡ булды. Башҡортостандың 100 йыллығына арналған «Йырсы ауыл» бәйгеһендә

лынә түгел, республика бәйгеһендә ҡатнашып ҡайтты Өмөтбайҙар
лэксеhe Сәғәҙәтова әлфиә Рәжәп ҡыҙы), Ҡуянтау ауылында «Дан
линә,дан, Башҡортостан» йыр-бейеү бәйгеләре лә уңышлы үтте.
Өмөтбайҙар 2-се урын яуланы. Театр йылына һәм Башҡортостандың
халыҡ шағиры Мостай Кәримдең 100 йыл тулыуына арналған ауыл
биләмәләре араһындағы «Мостай илендә» театрлаштырылған
тамашалар район конкурсында 1 урын алыуға өлгәштек. Был бәйгелә
китапханасыларҙың өлөшө ҙур.

Билал ауыл китпханаһы ҡатын-ҡыҙҙар советы менән берлектә төрлө
проекттар өҫтөндә эшләй. Мәҫәлән, Башҡортостандың 100 йыллығына «
100 изге эш», ҡатын-ҡыҙҙарҙың эшен йәнләндереүҙә «Ҡунаҡхана», ир-
егеттәр өсөн «Шундай ир-егеттәр була» исемле проекттар эшләне һәм әле
лә дауам итә.

Быйыл илебеҙ Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығын билдәләй, шуға күрә лә
Билал ауыл китапханаһында « Хәтер мәңгелек» исемле проект старт
алды, ошо арауыҡта бихисап осрашыуҙар үткәрелде, Баймаҡ
телевидениеһы, республика гәзите хәбәрселәре саҡырылды.

Ауыл Советының тормошонда, уның эшендә, Ҡатын-ҡыҙҙар
советы,Башҡорт ҡоролтайы, Ветерандар советы, ир-егеттәр ҡоро эшләп
килә. Мәҫәлән, Өмөтбай ауылының Ағинәйҙәр ҡоро бик әүҙем эш алып
бара. «Ҡатын-ҡыҙ милләт әсәhe» тигән Республика конкурсында
ҡатнаштылар. Киленгә һыу юлы башлау, мәсеттә үткән бөтә сараларҙа
актив ҡатнашалар. «Башҡорт мили аҙығы» темаһына Башҡортостан
телевидениеһының «Бәхетнамә» тапшырыуында ҡатнашып ҡайттылар.(
етәксеhe Мәжитова әнүзә Хажиәхмәт ҡыҙы), скандинавский ходьба һәм
башҡа сараларҙа әүҙем ҡатнашалар ауыл биләмәһендәге ауылдарҙағы
ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ.

Ауыл биләмәһендә 4 мәсет эшләп килә. Имам-хатиптар мәхәллә
уставына ярашлы дини йолаларҙы тотоп эштәрен уңышлы алып баралар.

Республика башлығының ҡарарына ярашлы үткән йыл биләмәнең 2
ауылына Баймырҙа һәм Һәмән ауылдарының урамдары яҡтыртылды.
Башҡа ауылдар өсөн дә тех.условиелар эшләп бөтөлгән,технологическое
присоединение өсөн 54022 һум аҡса тотонолдо, ҡалғандары өсөн аҡса
бүленеп, сират килеп еткәнен көтөп ҡалабыҙ инде. Был эштәрҙән тыш та
электр фонарҙарын ремонтлау, мәктәп алдарына һәм башҡа урындарға
яңы светодиодный фонарҙар ҡуйылды. 50 мең суммаға Сибайҙан
Каширин Г.В менән килешеү төҙөлдө һәм эшләнде. Билал ауылының
мәктәп яңы зонаһына 64820 һумлыҡ юл знактары һәм 35160 һумлыҡ
ҡорбалар, скверға таҡта материалдары һатып алып ҡуйылды. Шулай
уҡ Күгиҙел һәм Өмөтбай ауылдары өсөн юл знактары һатып алыу өсөн
ИП Каширин Г.В. һәм «Квант» йәмғиәте менән килешеүҙәр төҙөлдө 50
мең һумға, ҡар иреп бөтөү менән шул знактарҙы ҡуйыу планлаштырыла.
Йылың тәүге көндәренән алып аҙна һайын «Таҙа кесаҙна» өмәләре – юл
буйҙарын сүп-сарҙан таҙартыу, аркаларҙы( ауылға ингән, әбйәлил сиге)
буяу, «Дан аллеяһы» скверын өр-яңынан эшләү, башҡа сквер Күгиҙел
ауылы (Абзелилов Данис) учреждение алдарын, ауылдарҙың тышҡы

йөзөн матурлау,( 37433 һум краска, баннер һәм башҡа төҙөлөш материалдары) Өмөтбайҙа үткән «Ҡыҙҙар ҡайтты ауылға» сараларын үткәреү. Ҡыйлыҡтарҙы бер урынға өйөү, үҙ тракторы менән был эштә ярҙам күрһәткән Билалов Сәхи ағайға рәхмәтебеҙ сикһеҙ, был эштәр өсөн 13578 һум тотонолдо. Шулай уҡ «Таҙа Һаҡмар», «Мул һыулы Һаҡмар» акцияларында, «Йәшел Башҡортостан» акцияһында ағас үҫентеләре ултыртыуҙа ҙур өлөш индергән ауыл советы,китапхана, мәктәп, мәҙәни учреждениелар хеҙмәткрҙәренең, ауыл халҡының өлөшө ҙур.Һәмән ауылының ир-егеттәренең үҙ көсө менән юлдарға, мәктәп алдына ҡырсынташ түгеүе маҡтауға лайыҡ, депутаттар Күсәрбаев Йәҙгәр Булат улы, Сафина Айгөл Нуритдин ҡыҙы, тейәүҙә Асҡаров Мораҙым, Нургалин Рәшит һәм башҡалар, бөтәһен дә һанап китеү мөмкин түгел. Һәмән ауылына ингән ерҙәге быуаға торбаны яҡшылап һалыу өсөн «Златолит Экскорт» егеттәре ярҙам итте. Шулай уҡ Күгиҙел ауылының ир-егеттәре лә һынатманы, Баймаҡтың «Теплосеть» йәмғиәте менән килешеү төҙөп, 55680 һум суммаға экскаватор услугаһы күрһәтеп, Күгиҙел ауылында быуа эшләнелде. Ир-егеттәр үҙҙәренең трактор, яғыулығы менән таш ташынылар.

Берҙәм Рәсәй партияһының «Аныҡ эштәр» программаһы буйынса Өмөтбай һәм Күгиҙел ауылы клубтарының ҡыйығы профлист менән алмаштырылды,165 мең суммаға. Бөтә ауылдарҙың обелискылары буялды, тәртипкә килтерелде, бағана алмаштырылды, профлист һәм башҡа косметик ремонт эшләнелде, күпер өҫтө таҡталары алмаштырылды. Билал һәм Өмөтбай ауылдарына контейнер площадкалары монтажлау өсөн 182 мең суммаға һәм 11 штук евроконтейнерҙар 18 мең һумға алынды. Билал ауыл клубы зәңгәр яғыулыҡҡа – газға тоташтырылды, бына күрәһегеҙ хәҙер нисек йылы, комфортлы, клубтың башы ремонтланды.

Былар барыһыла ҡарап тораусға бәләкәй эш һымаҡ, шулайҙа определенный затрата талап итә. Шунан тағыла, русса әйткәндә преобретение газа тиҙәр бит инде.

«Урындағы башланғыстарҙы яҡлау программаһы» 2019 проекты нигеҙендә 1 500 000 мең һумға ауыл биләмәһе өсөн МТЗ-82.1 тракторы, ПНФ 0,8 тағылмаһы менән алынды. Бының өсөн 1000 000 республиканан субсидия, 150 мең ауыл хакимәттән (сельсоветтан) бүленде, 150 мең спонсорҙар, 200 мең ауыл халҡынан йыйылырға тейеш ине.

Ошо тракторҙы алыуҙа күрһәткән ярҙамдары өсөн барлыҡ ауыл биләмәһе халҡына, халыҡтан акса йыйыған мәктәп коллективына, активтарға, ауыл хакимиәте ҡыҙҙарына, ҙур күләмдә спонсорлыҡ ярҙам күрһәткән Күсәрбаев Илдар Булат улына, Хамматов Айҙар Айрат улына, Байрамғолова Гөлнара Зайнулла ҡыҙына 50 мең һум, ә халыҡ исеменән Үзәнбаев Айгиз, Гайсина Гөлфиә 10 мең һум, Аминева Миләүшә 3 мен

һум. Халыҡтан йыйып тултыра алмаган аҡсабыҙға район етәкселәренә, бигерәктә район башлығының урынбаҫары Дәүләтбаев Илнур Нурмөхәмәт улына, шулай уҡ бөтә ҡағыҙ эштәрен еренә еткереп эшләп тапшырған эштәр идарасыһы Заманова Г.А. рәхмәтебеҙ сикһеҙ.

Бөтәһе халыҡтан **168459** һум аҡса йыйып алынды Баймырҙанан 3600 һум 6 өйҙән, Өмөтбайҙан 45259 һум 91 өйҙән, Күгиҙелдән 50400 һум 92 өйҙән, Һәмәндән 25200 һум 41 өйҙән, Билалдан 88600 һум 106 өйҙән.

Быйылғы йылда Өмөтбай мәктәбенең тәҙрәлерен алыштырыуҙы планға алдынды һәм эштәр башланды, ошоларҙы аҡтарып сығарыуҙа уңыштар теләйем.

Эйе трактор булыу менән генә эш бөтмәне әле. Тракторға ҡар этеү өсөн ҡоролма (отвал) кәрәк. Күсәрбаев И.Б. менән һөйләшелгән, эшләп бирергә вәғәҙә итте, көтәбеҙ инде.Ваҡытлыса килеп сыҡҡан уңайһыҙлыҡтар өсөн дөрөҫөн аңлап халыҡҡа еткереүегеҙҙе һорайым. Ковш ҡар этеү өсөн ҡоролма түгел, шулай ҙа ярҙамдан отказ булғаныбыҙ юҡ. Йыл башынан юлдарҙы ҡарҙан таҙартыу өсөн бөтәһе 104933,3 һумлыҡ килешеү төҙөлдө.

Тағы ла район хакимиәте, район больницаһы хужалары тарафынан беҙҙең яҡҡа ыңғай ҡараш Күгиҙел һәм Һәмән ауылдарына капиталь һәм модуль ФАП төҙөү күҙҙалана, шулай уҡ трассанан Һәмәнгә тиклем асфальт юл һәм биләмә лә убойный цех төҙөү планлаштырыла.

Ҡыш айҙарында волейбол ярыштары әүҙемләште. Был спорт төрҙәрен бергәм күтәреп алған спорт һөйөүселәр Өмөтбайҙан Садыҡов Разул Фарит улы, Билалдан Әхмәтов Марат һәм Әбйәлилов Иҙелде телгә алмау мөмкин булыр ине.

Һүҙемде тамамлап шуны әйтер инем, отчет докладында эшләнгән һәм эшләнә торған бер ауыл хакимиәте көсө менән генә атҡарылып бөтөрлөк түгел. Ауыл биләмәһендә эшләп килгән ойошма, учреждение етәкселәре, депутаттар, актив һәм халыҡ менән берлектә атҡарып сығыуыбыҙға ышанам. Һеҙҙең барығыҙға ла һаулыҡ, эштәрегеҙҙә уңыштар, ғаилә именлеге теләйем. Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!